**Хоҙайым, ҡыҫҡа итмә ғүмерҙе!**

Эй, Хоҙайым, һаҡла тормошомдо,
Бар яҙмышым бит һинең ҡулыңда.
Көтмәгәндә, ҡапыл әйләнмәһәм ине
Мәкерленең, мәрхәмәтһеҙ бер ҡолона.

Эй, Хоҙайым, һаҡла ғаиләмде
Улар барыһы ла, Һинең алдыңда.
Һаҡла бер үк бәлә-ҡазанан.
Мәңге булыр өсөн Һинең яныңда.

Барыбыҙға ла бир оҙон ғүмер,
Ауыр сирҙән беҙҙе һаҡла Һин.
Юл сәфәргә сыҡҡан саҡта,
Яман кешеләрҙән,беҙҙе яҡла Һин!

Һәр бер һулыш, Раббым Һинән килә,
Зинһар өсөн, ҡыҫҡа итмә ғүмерҙе.
Туғандарым, дуҫ иштәрем менән бергә,
Йәшәргә яҙһын, Һинең янда күңелле.